ISBN 978-5-91608-181-7 С. 167-171

https://doi.org/10.31833/conf_ihll2019.032

УДК: 811.512.141’373.45:398.22(=512.141)

**А. Ш. Ишмөхәмәтова**

*Ордена Знак Почета Институт истории, языка и литературы УФИЦ РАН*
*проспект Октября, 71, Уфа, 450054, Россия*
*E-mail: ishmuhametova_anita@mail.ru*

# «УРАЛ-БАТЫР» ЭПОСЫНДА ҮҘЛӘШТЕРЕЛГӘН ҺҮҘҘӘР
## (Башҡорт теленең фольклор корпусы нигеҙендә тикшереү)

Влияние тюрки Урало-Поволжья на башкирский язык наиболее ярко подтверждается арабскими и персидскими заимствованиями, перешедшими из него в народно-разговорный язык. В статье рассматриваются заимствования, встречающиеся в башкирском эпосе «Урал-батыр». В лексическом составе эпоса получили отражение заимствования, образованные аналитическим и синтетическим способами словообразования. Большинство сочинительных и подчинительных союзов в современном литературном языке по происхождению являются арабо-персидскими.

*Ключевые слова:* башкирский корпус, корпус фольклора, эпос «Урал-батыр», арабские заимствования, персидские заимствования, аналитическое словообразование, синтетическое словообразование, арабо-персидские союзы.

Башҡорт теленең фольклор корпусына әлеге көндә бөтәһе 151 эпос бар, шулар араһында «Урал-батыр» эпосының 2 варианты ингән [Башҡорт теленең фольклор корпусы].




| Жанр - Төр/ тематика | Исем | Сығанаҡ | Мәғлүмәт | Һүҙ формалары |
|---|---|---|---|---|
| Эпос - Мифологик | Урал батыр | Башҡорт халыҡ ижады. Өсөнсө том. Эпос.— Өфө: Башҡортостан Китап нәшриәте, 1998. Б. 27-126 | 1910 йылда Ырымбур губернаһы Эткол волосы (Башҡортостандың хәҙерге Баймаҡ районы) Иҙрис ауылында Ғәбит сәсән Арғынбаев (1856-1921) менән Бәләкәй Эткол ауылында Хәмит сәсән Әлмөхәмәтовтан (1861-1923) Мөхәммәтша Буранғолов (1888-1966) яҙып алған. | 15269 |

Борон-борон борондан
Кеше-маҙар бумаған,
Килеп аяҡ баҫмаған
У тирәлә ҡоро ер
Барлығын һис кем белмәгән,
Дүрт яғын диңгеҙ уратҡан
Буған, ти, бер урын.
Анда буған, ти, борон
Йәнбирҙе тигән ҡарт мән
Йәнбикә тигән ҡарсыҡ,
Ҡайҙа барһа, аларға
У урында юл асыҡ.
Бы ҡарт мән бы ҡарсыҡ
Ҡайҙан мында килеүен,

Корпустан күренеүенсә, текст 15269 һүҙ формаларынан тора.

Эпостарҙың телен тикшергәндә Урал-Волга буйы төркийенең башҡорт теленә булған йоғонтоһо күренә. Һөйләү теленең һүҙлек составындағы ғәрәп һәм фарсы телдәренән үҙләштерелгән һүҙҙәр быға асыҡ дәлил.

«Урал-батыр» эпосының лексикаһында ғәрәп һәм фарсы сығышлы һүҙҙәрҙең булыуы күҙгә ташлана. Улар йөҙгә яҡын: 55 ғәрәп (*аждаһа, азат, батша, булат, вайран, гөл, гүйә, гүр, дана, дейеү, дошман, дуç, ҙур, зар, зинһар, йә, йәки, йән, йәншишмә, йәр, кәм, маҙа, майҙан, мат, нәҙек, өмөт, сара, таҙа, тар-мар, тән, фарман, хуп, хур, хуш, һаман, һарай, һис, һуш, һәр, шат, шаһ, шишмә, әгәр, януар*) һәм 44 фарсы (*алла, аман, арба, бәлә, ваҡыт, вәғәҙә, вәзир, гел, ғүмер, ғәйеп, ғәйрәт, ғәскәр, донъя, ен, зат, имен, исем, ҡаф, ҡорбан, ҡәҙер, ҡәһәр, меçкен, мәрйен, нур, риза, рәхәт, сабыр, саф, сер, сират, сәбәп, сәләм, тылсым, тәҡәт, тәхет, файҙа, хайуан, хаҡ, халыҡ, харам, харап, хикмәт, хәбәр, хәйлә, хәл, хәтер, һауа, шарт, шик, әҙер, әллә, әммә, яза, яуап, яфа)* телдәренән үҙләштерелгән һүҙҙәр.

Халыҡтың һөйләү телмәрендә осраған ғәрәп һәм фарсы һүҙҙәренән күпселек осраҡта синтетик юл менән ҡылым яһалыуы күҙәтелә: мәç.: *зар – зар+лан-, нур – нур+лан-, рәхәт – рәхәт+лән-, хур – хур+лан+, шат – шат+лан-, шик – шик+лән-, яфа – яфа+лан-* һ.б.

*Кешеләр бынан [йыландар сағыуынан]* ***зарланып,***
*Ҡурҡынышып, ялбарып,*
*Уралға бары килгәндәр...*
*Көн дә йөҙө үҙгәрә,*
*Нуры кәмеп,* ***хурлана;***
*Элек көндәш булһа ла,*
*Ҡояштан ул* ***нурлана.***

Ә яҙма әҙәбиәт аша килеп инеп, йәнле һөйләү телендә йыш ҡулланылмаған һүҙҙәр аналитик юл менән, йәғни үҙләштерелгән һүҙҙәргә ярҙамсы ҡылым ҡушып яһалғандар.

Мәçәлән:

**ғүмер + ит-:**

*Килмәһәм, оҙаҡ көтмәçһең,*
*Ситтә* ***ғүмер итмәçһең****...*

**азат + ит-:**

*Батша асыуын ҡуптарған,*
*Һиңә ҡаршы өскөргән,*
*Шул айканлы беҙҙәрҙе*
*Шатлы* ***азат иттергән***
*Батша ҡыҙы булды бит...*

**хур + бул-:**

*Әсәм барып* ***хур булған,***
*Ҡайғыһынан һары алған.*

**тар-мар + ит-:**

*Шүлгәнгә яу асһаң да,*
*Уны* ***тар-мар итһәң дә,***
*Күленән ил мандымаç...*

**харап + ит-:**

*«Зинһар, ергә төшмәһен, тип,*
*Илде* ***харап ит****мәһен», — тип,*
*Барыһы ла Уралдан*
*Ялбарышып һораған.*

**ант + ит-:**

*Ер үбеп* ***ант итмәһәң,***
*Кеше алдында баш эйеп,*
*Аҡ һүҙеңде бирмәһәң...*

**дуҫ + бул-:**

*Уралға* ***дуҫ булһағыҙ,***
*Атайымдың дуҫтарын*
*Донъянан юҡ итегеҙ...*

Быңдай аналитик формаларҙы беҙ башҡорт әҙәби теленә тик Урал-Волга буйы төрки теленән килеп ингән тип ап-асыҡ әйтә алабыҙ [Ишбирҙин, 1993, 181].

Текста шулай уҡ ике ысул – аналитик һәм синтетик юлдар менән яһалған конструкциялар ҙа осрай. Мәҫәлән: *шат + лан-, шат + ҡыл-, шат + бул-; хур + лан-, хур + ит-, хур + бул- һ.б.*

Дөйөм төрки сығанаҡлы *ҡыл-* ярҙамсы ҡылымы актив һүҙлек запасына ҡарамай, ул тик айырым ғәрәп һәм фарсы һүҙҙәре менән генә ҡулланылып йөрөй.

*Илгә ҡыран һалғандың,*
*Илде* ***тар-мар ҡылғандың,***
*Таш аттырып ҡая тауға,*
*Дейеүгә ут һалғандың*
*Йән һөйгәне Һомаймы?*
*Ауыртыныу-һыҙлауҙан*
*Кешеләрҙе ҡотҡарып,*
*Барыһыны* ***шат ҡылып,***
*Мәңге үлмәҫ ҡылайыҡ...*

«Урал-батыр» эпосыныда шулай уҡ монгол һәм рус теленән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең булыуы күҙгә ташлана: ***нөгәр*** *(монг.),* ***рәт*** *(рус),* ***ям*** *(рус).*

*Арабыҙҙан, һанаһаҡ,*
*Һәр* ***нөгәрҙе*** *ҡараһаҡ...*
*Урал да* ***рәт*** *боҙмаған,*
*Барып торған ыңғайға;*
*Батша ҡыҙы, аралап,*
*Бер егетте һайлаған...*
***Ямды*** *һыуҙан баҫтырған,*
*Һалҡын һыуҙы таштырған...*

Быларҙан тыш, текста хәҙерге башҡорт әҙәби теле өсөн хас булмаған лексик берәмек ***баҕ*** *(баҡса)* һүҙе осрай:

*Донъя ул бер* ***баҕ*** *икән,*
*Йән эйәһе шул* ***баҕта***
*Донъя быуынын һанаған...*

Был һүҙҙең ҡулланылыуы эпостың бик боронғо осорҙа барлыҡҡа килгәнлеген дәлилләй.

Теркәүестәр, айырым категория булараҡ, сағыштырмаса һуңғараҡ формалашҡан, шуға күрә фольклорҙа, халыҡ ижадында улар бик һирәк. Мәҫәлән, «Урал-батыр» эпосында Урал-Волга буйы төрки теле аша ғәрәп-фарсы телдәренән үҙләштерелгән түбәндәге теркәүестәр осрай: *әммә, йә, йәки, әгәр, гүйә.*

**әммә** (*ғәрәп сығанаҡлы*) – *ҡаршы ҡуйыу теркәүесе.* Был теркәүес мәғәнәһе буйынса *ләкин* теркәүесенә яҡын тора һәм шулай уҡ ҡаршылыҡлы эш-хәлдәрҙе белдергән һөйләм киҫәктәрен һәм һөйләмдәрҙе теркәй.

*– Мин Үлемде табыуҙан*
*Бер ҙә ҡурҡып тормайым,*
***Әммә*** *тотоп биреүгә*

*Һис ҡасан да күнмәйем.*

**йә** (*фарсы сығанаҡлы*) – *бүлеү теркәүесе.* Был теркәүес һөйләм эсендә яңғыҙ йәки парлап ҡулланыла һәм эш-хәлдең ҡабатланып тороуын, ике йәки бер нисә эштең береһе генә үтәлеүен, йә булмаһа берәй эштә ике йәки бер нисә предметтың береһе генә ҡатнашыуын белдерә.

*Быны батша* ***йә*** *үҙе,*
***Йә*** *булмаһа мин йотам:*
*Батшабыҙҙың бар серен*
*Үҙ башымда мин тотам.*

**йәки** (*фарсы сығанаҡлы*) *– бүлеү теркәүесе.*

*Бағтың туҙған үҫмерен*
***Йәки*** *көнө тулғанын*
*Сүпләп, бағты бушатҡан,*
*Унан донъя ташлатҡан*
*Бөтмәй торған заң икән.*

**әгәр** (*фарсы сығанаҡлы*) – *шарт теркәүесе.* Ул эйәртеүле ҡушма һөйләм составындағы эйәрсән һөйләм алдынан килеп, эйәрсән һөйләмде баш һөйләмгә теркәүсе грамматик сара вазифаһын үтәй. Шуның менән бер рәттән эйәрсән һөйләмдең хәбәре менән бергә шарт мөнәсәбәтен белдерә.

*Әгәр* теркәүесе — морфологик составы яғынан ябай теркәүес. Ул фразаның башында килеп, шарт һөйкәлеше аңлатҡан мәғәнәне көсәйтә.

***Әгәр*** *тауға төкөрһә,*
*Тауы ireп, һыу булыр,*
*Ағып бары шул саҡта,*
*Бер үҙәнгә йыйылыр…*

**гүйә** (*фарсы сығанаҡлы*) – оҡшатыу-сағыштырыу теркәүесе. Был теркәүес бер нәмәне йәки эш-хәлде икенсеһе менән сағыштырғанда, оҡшатҡанда ҡулланылып, *кеүек, шикелле, әйтерһең дә* тигән мәғәнә бирә.

*Бал ҡортондай нәҙек бил*
*Борғоланып уйнаған;*
***Гүйә****, күптәнге танышы,*
*Көмөштәй саф тауышлы;*
*Уйнап-көлөп һүҙ ҡушҡан,*
*Ҡыҙҙы күргәс, Урал да*
*Ни әйтергә белмәгән…*

Был теркәүес тик поэтик стилгә хас.

Шулай итеп, халыҡ аҡылын, уның тәрән фәлсәфәһен, тел байлығын сағылдырған башҡорт халҡының бөйөк ҡомартҡыһы «Урал-батыр» эпосының һүҙлек составында төп башҡорт һүҙҙәренән тыш иҫке төрки, ғәрәп, фарсы, монгол, рус телдәренән ингән һүҙҙәрҙең булыуы күҙәтелә. Текста үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең күпселек осраҡта аналитик һәм синтетик юл менән яһалыуҙары асыҡлана.

## Литература

Башҡорт теленең фольклор корпусы. URL:http://212.193.132.98/bashkorp/korpusfol (инеү ваҡыты: 19.09.2019).

Башҡорт халыҡ ижады: Эпос. Беренсе китап / төҙ. М. Сәғитов. Өфө, 1972. 242 б.

Башкирский народный эпос / составители тома: Мирбадалева А.С., Сагитов М.М., Харисов А.И. Москва, 1977. 320 с.

Башкирско-русский словарь: 32000 слов / под ред. Ураксина. Москва, 1996. 884 с.

Галяутдинов И. Г. Два века башкирского литературного языка. Уфа, 2000. 448 с.

Ишбердин Э. Ф., Халикова Р. Х., Галяутдинов И. Г., Ураксин З. Г. Очерки истории башкирского литературного языка. – М., 1989. 256 с.

Ишбирҙин Э.Ф., Ғәләүетдинов И.Ғ., Халиҡова Р.Х. Башҡорт әҙәби теленең тарихы. Өфө, 1993. 320 б.

Хайрулина Р. Х. Фразеологическая картина мира: от мировидения к миропониманию. Уфа, 2008. 300 с.

Әхтәмов М. Х. Хәҙерге башҡорт теле. Лексикология. Өфө, 1986. 136 б.

**A. Sh. Ishmukhametova**

*Order of the Badge of Honour Institute of History,*
*Language and Literature UFRC Russian Academy of Sciences*
*October Avenue, 71, Ufa, 450054, Russian Federation*
*E-mail: ishmuhametova_anita@mail.ru*

## THE BORROWINGS IN THE EPIC «URAL-BATYR» (The study is based on the Folklore Corpus of the Bashkir language)

The epic "Ural-Batyr" recorded 55 Arabic and 44 Persian borrowings. The lexical composition of the epic reflects borrowings formed by analytical and synthetic ways of word formation. Most of the compositional and subordinate unions in the modern literary language are Arabic-Persian in origin.

*Keywords:* Bashkir corps, folklore corps, epic Ural-Batyr, Arabic words, Persian words, analytical method of word formation, synthetic method of word formation, Arab-Persian unions.

## References

Folklore Corpus of the Bashkir language. URL:http://212.193.132.98/bashkorp/korpusfol (accessed: 19.09.2019).

Bashkir folk art: Epic. The first book / comp. M. Sagitov. Ufa, 1972. 242 p.

Bashkir folk epic / volume compilers: Mirbadaleva A. S., Sagitov M. M., Kharisov A. I. Moscow, 1977. 320 p.

Bashkir-Russian dictionary: 32000 words / ed. Uraksin. Moscow, 1996. 884 p.

Galyautdinov I. G. Two centuries of Bashkir literary language. Ufa, 2000. 448 p.

Ishberdin E. F., Khalikova R. H., Galyautdinov I. G., Uraksin Z. G. Essays on the history of the Bashkir literary language. – M., 1989. 256 p.

Ishberdin E. F., Khalikova R. H., Galyautdinov I. G., Uraksin Z. G. History of the Bashkir literary language. – Ufa, 1993. 320 p.

Khairullina R. H. Phraseological picture of the world: from worldview to worldview. Ufa, 2008. 300 p.

Akhtyamov M. H. Modern Bashkir language. Lexicology. –Ufa, 1986. 136 p.